ВикипедиЯ
*Ирекле энциклопедия*

# Баш бит

## Башҡорт Википедияһына рәхим итегеҙ!

300-ләп телдәге ирекле интернет энциклопедияның башҡортса бүлегендә 64 288 мәҡәлә бар.

Уны төҙөүҙә **һәр кем** ҡатнаша ала.
Һеҙҙе лә берҙәм ирекмәндәр ғаиләһенә саҡырабыҙ!
Welcome to the Embassy! * Добро пожаловать в Посольство!

**Порталдар**

| | | |
|---|---|---|
| Башҡортостан | Фән | Техника |
| Башҡортостан шәхестәре | География | Йәмғиәт |
| Башҡортостан ауылдары | Тарих | Ислам |

Яңы портал: Башҡорт әҙәбиәте

Әүҙем порталдар: Башҡорт әҙәбиәте, Бөрйән, Салауат, Нуриман районы

## Көн рәсеме



## Һайланған мәҡәлә



**Эдгар По** (19 ғинуар 1809 йыл, Бостон, АҠШ — 7 октябрь 1849 йыл, Балтимор, АҠШ) — Америка яҙыусыһы, шағир һәм әҙәби тәнҡитсе, Америка романтизмы вәкиле. Хәҙерге заман детективына һәм психологик проза жанрына нигеҙ һалыусы. Эдгар Поның ҡайһы бер әҫәрҙәре фәнни фантастиканың барлыҡҡа килеүенә һәм үҫешенә булышлыҡ иткән. Уның ижадының үҙенсәлекле һыҙаттары: иррационаллек, мистицизм, һәләкәткә дусар булыу, һүрәтләнеүсе хәлдәрҙең ғәҙәттән тыш булыуы. Бигерәк тә «ҡурҡыныс» һәм мистик хикәйәләр һәм «Ҡарға» шиғырының авторы булараҡ билдәле.

Эдгар По новелланы үҙенең төп ижад формаһы итеп алған тәүге Америка яҙыусыларынан. Ул тик әҙәби ижад менән генә көн итергә маташҡан, шуға күрә уның тормошо һәм карьераһы финанс ауырлыҡтарҙа үткән, етмәһә, хәмер менән дә мауыҡҡан булған. Егерме йыл ижади ғүмере эсендә Эдгар По ике повесть, ике поэма, бер пьеса, етмешләгән хикәйә, иллеләп шиғыр, ун тирәһе эссе яҙған. Әҫәрҙәре журналдарҙа һәм альманахтарҙа баҫылған, һуңынан йыйынтыҡтарға тупланған.

Эдгар По иҫән сағында тәү сиратта әҙәби тәнҡитсе булараҡ билдәле булыуға ҡарамаҫтан, артабан уның әҙәби әҫәрҙәре донъя әҙәбиәтенә, космология һәм криптографияға йоғонто яһаған. Яҙыусы Европала тыуған иленә ҡарағанда нығыраҡ танылған. Жюль Верн, Говард Филлипс Лавкрафт, Артур Конан Дойл кеүек әҙиптәр Эдгар Поның ижадын юғары баһалай, үҙҙәре популярлаштырған жанрҙарҙа уның беренселеген таный. Эдгар По 1809 йылдың 19 ғинуарында Бостонда, актёрҙар Элизабет

## Яңы мәҡәлә

Мәҡәлә оҫтаһы | Тиҙ башланғыс

## Бөгөн: 16 июль ♦ Кисәге: 15 июль ♦ Иртәгә: 17 июль ♦ Барлыҡ көндәр ♦

## Байрамдар һәм иҫтәлекле даталар

### Халыҡ-ара

### Рәсми булмаған

- Ер: Тәмле аш-һыу (ризыҡ) көнө.
  - Асфальтта һүрәт төшөрөү көнө.
  - Йылан көнө.

### Милли

- Грузия: Рухи һөйөү көнө.
- Уругвай: Халыҡ-ара футбол чемпионатында еңеү көнө.

### Һөнәри

- Украина: Бухгалтерҙар көнө.

## 16 июль юбилярҙары

Арнольд Хопкинс По һәм Дэвид По ғаиләһендә донъяға килгән. Элизабет По Бөйөк Британияла тыуған. 1796 йыл башында ул әсәһе, шулай уҡ актриса менән, АҠШ-ҡа күсеп килә, бәләкәйҙән сәхнәлә сығыш яһай. Поның атаһы Ирландияла тыуған, шунан атаһы менән Америкаға килгән.

Эдгар ғаиләлә уртансы бала булған, уның ағаһы Уильям Генри Леонард (1807—1831) һәм һеңлеһе Розали. ↪ *дауамы…*

*Архив* • *Кандидаттар* • *Төҙәтеү*

## Шуларҙы беләһегеҙме?

- Башҡорттарҙың **мең** һәм **ғәйнә** ҡәбиләләренең атамаһы 1000 һанын аңлата: улар икеһе лә боронғо ғәскәри берәмек исеменән барлыҡҡа килеүе мөмкин.
- «Мең дә бер кисә» әкиәттәр йыйынтығында Ғәббәсиҙәр хәлифәлегенең хакимы **һарун әр-Рәшит** ғәҙел батша булып һүрәтләнә.



Беҙҙең эраға тиклем 2000—500 йылдарҙа ике тәғәрмәсле арбаларҙың (баш. (рус.)) донъя буйлап таралыуы

- 1230-сы йылдарҙа Көньяҡ Уралда йәшәгән мадьяр монахы Юлиан, Башҡортостан хакимының мосолман диненә ныҡ инаныуы тураһында хәбәр иткән.
- 1386 йылдың 14 февралендә Краковта Бөйөк Литва кенәзе Ягайло суҡындырылып, Польша королеваһы Ядвига менән никахлашҡандан һуң Речь Посполитая дәүләте барлыҡҡа килә.
- Беҙҙең эраға тиклем VII—VI меңйыллыҡҡа ҡараған Мулла II һәм Дәүләкән II торамаларында **йорт атының** иң боронғо ҡалдыҡтары табылған. Шулай уҡ беҙҙең эраға тиклемге 2026 йылға ҡараған Көньяҡ Уралда табылған археология ҡаҙылмаларына ярашлы ике тәғәрмәсле арбаларҙы (баш. (рус.)) тәү башлап һынташты мәҙәниәте кешеләре ҡуллана башлаған.
- **Мали империяһы** хакимы Муса Манса 1324 йылда хаж ҡылғанда уны 60—80 мең кеше оҙатып барған. Мәккәгә барған юлда Мали хакимы үҙенең 12 750 тонна алтынын халыҡҡа тараткан.
- Алтын Урҙала рәсми рәүештә ислам динен ҡабул иткән **ханға** ғәрәп илсеһе Ибн Баттута бик юғары баһа бирә: «Донъялағы иң бөйөк һәм иң ҡеүәтле ете батшаның береһе ул».

*Архив* • *Тәҡдим* • *Төҙәтеү*

## Һайланған исемлек һәм портал

*Һуңғы сифатлы мәҡәлә:* Башҡорт уғы.

*Һуңғы һайланған портал:* Башҡортостан ауылдары.

Сифатлы мәҡәләләр (17) | Исемлектәр һәм порталдар (1, 1) | Үҙгәртеү

- Дунаев Андрей Павлович (1931—1996), мәғариф хеҙмәткәре. 1949 йылдан Башҡорт АССР-ының Балаҡатай районы мәктәптәре уҡытыусыһы, шул иҫәптән 1967 йылдан Нөгөш һигеҙ йыллыҡ, 1974—1995 йылдарҙа Ҡарлыхан урта мәктәбе директоры. РСФСР уҡытыусылары съезы делегаты (1978). Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған уҡытыусыһы (1987). Сығышы менән ошо районды Нөгөш ауылынан.
- Живаев Александр Николаевич (1956), тренер, педагог. Стәрлетамаҡ ҡалаһының 2-се балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе директоры. Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған физик культура һәм спорт хеҙмәткәре. II дәрәжә «Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн» орденының миҙалы менән бүләкләнеүсе (2022).

***тулы исемлек* [күрһәтергә]**

## Яҡшы мәҡәлә



**Диноза́врҙар** «ҡурҡыныс, ҡот осҡос, хәүефле» һәм σαῦρος «кеҫәртке» — мезозой эраһында Ер йөҙөндә 160 йыл буйы хакимлыҡ иткән умыртҡалыҙ, ер өҫтө һөйрәлеүселәре отрядына ҡараған хайуан. Улар өҫтөнлөк иткән дәүер — яҡынса һуңғы триас осоронан (бөгөнгөнән 225 миллион йыл элек) аҡбур осоро аҙағына тиклем (бөгөндән 65 миллион йыл элек). Аҡбур осоронан өсөнсөл осорға күскән ваҡытта, сағыштырмаса ҡыҫҡа геологик ваҡыт эсендә, бик күп хайуандар һәм үҫемлектәр менән бергә юҡҡа сыға. Динозаврҙарҙың һөлдәләре планетаның бөтә континенттарында ла табылған. Палеонтологтар тарафынан был хайуандарҙың 500-ҙән артыҡ төрө билдәләнгән һәм тасуирлап һүрәтләнгән Улар ике ҙур төркөмгә бүленә — ҡоштар һәм кеҫәрткеләр.

«Динозавр» терминын фәнни әҙәбиәткә 1842 йылда инглиз биологы Ричард Оуэн беренсе тапкыр индереп ебәрә. Ул был һүҙҙе ташҡа әйләнгән боронғо кеҫәрткеләрҙең тәү табылған һәм ҙурлығы менән ғалимдарҙы таң ҡалдырған һөлдәләрен тасуирлағанда ҡуллана. Таксономик яҡтан атама динозаврҙың теше, тырнағы һәм башҡа үҙенсәлегенә ишара булһа ла, Оуэн был терминды табылған һөлдәләрҙең нәҡ ҙурлығына ҡарап бирә. Үҙенең ҡараштарын нигеҙләп, Оуэн динозаврҙарҙы икенсел осорҙоң *ҡалын тиреле хайуандары* тип нарыҡлай. XIX быуатта ҙур бегемоттарҙы, филдәрҙе һәм носорогтарҙы тап *ҡалын тиреләләр* тип йөрөткәндәр, ә икенсел осор тип мезозой дәүере аталған.

Ер аҫтында табылған ҙур һөйәктәрҙе боронғо замандә Троя һуғышында ҡатнашыусыларҙан ҡалған тип, Урта быуаттарҙан XIX быуатка тиклем туфан ҡалҡыуы ваҡытында һәләк булған бәһлеүән һөйәктәре тип иҫәпләгәндәр. Алыҫ Көнсығышта аждаһа һөйәктәре, уларҙың дауалау сифаты бар тип ҡарағандар.

1824 йылда Король геология йәмғиәте президенты Уильям Бакэнд Юра осоро сланецтарында табылған бик боронғо хайуан һөйәктәре табылыуы хаҡында сығыш яһай. Сағыштырмаса анатомия белгесе Жорж Кювье ярҙамы менән Бакленд табылған һөйәктәрҙе гигант йыртҡыс кеҫәрткенеке тип квалификациялай, һәм уны мегалозавр, йәғни «ғәйәт ҙур кеҫәртке» тип атай. ↪ *д а у а м ы…*

*Архив* • *Кандидаттар* • *Төҙәтеү*

«https://ba.wikipedia.org/w/index.php?title=Баш_бит&oldid=1293969» битенән алынған